**Вариант 1**

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: трамвай, ҡала.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Техника.

Хәҙер ауыл тормошонда ла, ҡала тормошонда ла техника зур урын тота.

Иртә менән автобустар, трамвай һәм троллейбустар кешеләрҙе эшкә алып бара. Төрлө материалдар, эш ҡоралдары автомобиль, поезд һәм пароходтар менән ташыла.

Ауылда ла машиналарға эш етерлек. Улар һауынсыларҙы, механизаторҙарҙы йөрөтә. Яҡшы машиналар һәм аппараттар иген үҫтереүҙә лә, малсылыҡта ла файҙаланыла. Трактор, комбайндар һәм йөк машиналары яҙғы, көҙгө эштәрҙә киң ҡулланыла.

етерлек – хватает　　　　һауынсыларҙы – доярок

иген үҫтереүҙә – в земледелии　　　　малсылыҡта – в животноводстве

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| һандуғас | йылға | бала |
| ҡарсыға | үләне | урман |
| ерек | бал | балыҡ |
| еләк | умартасы | ағас |
| әрем | көнбағыш | көньяҡ |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| дуб | река | гора |
| город | север | деревня |
| заяц | Аккуль | волк |

## Вариант 2

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: көн, дәрес.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Колхозда ҡыш.

Колхозда ҡышын да эш ҡайнай. Ҡыш көнө яҙға әҙерлек башлана. Мастерскойҙарҙа машиналарға ремонт яһала. Улар йәй көнө ватылмай эшләргә тейеш.

Үҫемлектәр ерҙең дымлы булыуын яраталар. Колхозсылар ҡышын яланда ҡар тоталар.

Ҡышҡы көн ҡыҫҡа һәм һыуыҡ. Ә колхоздың теплицаһында көн оҙон һымаҡ, *сөнки* унда йылы *һәм якты*. Унда колхозсылар ҡыяр, һуған, редиска үҫтерәләр.

Фермала ла эш туҡтамай. Колхоз илебеҙгә һөт, ит һәм йомортҡа бирә.

| | |
|---|---|
| ватылмай – не ломаясь | дымлы - влажный |
| ҡар тоталар – задерживают снег | сөнки – потому что |

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| һандуғас | йылға | бал |
| ҡарсыға | дарыу | урман |
| ерек | сәскә | балыҡ |
| еләк | умартасы | ағас |
| әрекмән | көнбағыш | көньяҡ |

2. Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| лошадь | город | соловей |
| гора | лес | большой |
| деревня | чистый | черный |

## Вариант 3

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: көҙ, айыу.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Октябрь.

Октябрь - көҙҙөң беренсе һыуыҡ айы. Иртәле – кисле бик һыуыҡ була, ямғырҙар йыш яуа. Ағастар яланғаслана. Тәүге ҡар яуа. Күлдәр, быуалар туңа.

Күсмә ҡоштар йылы яҡҡа китеп бөтә. Сыйырсыҡ, ҡарлуғас, һандуғас күптән инде киткән була. Иң һуңғы булып сәүкәләр, өйрәктәр китә. Беҙҙең яҡтарға башҡа ҡоштар килә. Октябрь аҙағында, ноябрь башында айыу, бурһыҡ йоҡоға тала.

Кешеләр һалҡын ҡышҡа әҙерләнә: мал аҙбарҙарын ремонтлай, өйҙәрен йылыта.

| | |
|---|---|
| сәүкәләр – галки | иң һуңғы булып – самыми последними |
| быуалар – пруды | күсмә ҡоштар – перелетные птицы |

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| һандуғас | йылға | бал тәме |
| ҡарсыға | дарыу үләне | урман |
| ерек | сәскә балы | балыҡ |
| еләк | умартасы | ағас |
| әрекмән | көнбағыш | көньяҡ |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| башкир | лиса | белый |
| красивый | высокий | хороший |
| корова | страна | брат |

## Вариант 4

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: миҙал, витамин.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Башҡорт балы.

Бал ҡорто беҙҙең планетала бик борондан билдәле. Бал <u>татлы</u> ла, шифалы ла. Уны яратмаған кеше юҡтыр.

Балда 60-тан ашыу төрлө матдә: углеводтар, аҡһым, микроэлементтар, минераль тоҙҙар, ҡиммәтле витаминдар бар. Шуға ла уны бик күп ауырыуҙарҙы дауалауҙа ҡулланалар.

Башҡорт балы элек –электән бөтә донъяға билдәле. Ул бик <u>тәмле</u> һәм файҙалы. Париж йәрминкәһендә, Мәскәүҙә үткәрелгән халыҡ-ара конгреста башҡорт балы алтын миҙал яулап алған.

| | |
|---|---|
| бал ҡорто – пчела | аҡһым - белок |
| матдә- вещество | йәрминкә - ярмарка, выставка |

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| тәбиғәт | сәскә | саған |
| үлән | ҡарға | юл |
| ҡылған | имән | сәүкә |
| урман | суртан | ялан |
| кесерткән | терпе | ҡарағас |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| река | народ | столица |
| Ишимбай | юг | дуб |
| русский | собака | норка |

**Вариант 5**

**Работа с текстом.**

1.Спишите и переведите текст.

2.Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.

3.Просклоняйте по падежам имена существительные: композитор, бала.

4.Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Зағир Исмәғилев.

Зағир Исмәғилев – күренекле башҡорт композиторы. Уны халыҡ «Урал йырсыһы» тип атай.

Зағир Исмәғилев матур Белорет районында тыуған. Ул бала саҡтан уҡ халыҡ йырҙарын яратҡан. Зағир үҙенең бөтә ғүмерен музыка, йыр менән бәйләгән. Егерме йәшендә ул Мәскәү консерваторияһына уҡырға ингән.

Бөйөк Ватан һуғыш йылдарына арнап композитор «Таһир Кусимов», «Шайморатов генерал», «Котелок» йырҙарын ижад иткән.

Беҙҙең илебеҙ уға «СССР-ҙың халыҡ артисы» тигән маҡтаулы исем бирҙе.

| | |
|---|---|
| ижад иткән- написал, сочинил | арнап- посвященные |
| күренекле – знаменитый | маҡтаулы - почетный |

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| ҡыҙылтүш | быҙау | айыу |
| ҡарға | төньяҡ | ҡама |
| шыршы | көнсығыш | әтәс |
| ҡош | хайуан | сел |
| балыҡ | ҡарағас | һеләүһен |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| овца | город | кукушка |
| воробей | Башкортостан | матрешка |
| лиса | коза | трава |

## Вариант 6

**Работа с текстом.**

1.Спишите  и переведите текст.

2.Образуйте степени  сравнения от подчеркнутых прилагательных.

3.Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡош, ҡарлуғас.

4.Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Ҡоштар.

Ҡыш. Бөтә ерҙә ап-аҡ ҡар ята. Урман тып-тын. Ҡыш беҙҙең яҡта бик ҡаты була.

Был ваҡытта сыйырсыҡ, ҡарлуғас, һандуғас күптән инде йылы яҡҡа киткән була. Беҙҙең яҡта ҡышларға сәүкә, һайыҫҡан, турғай, күгәрсен генә ҡала.

Ҡорҙар, һуйырҙар сатнама һыуыҡтарҙы ҡар аҫтында үткәрәләр. Ә һайыҫҡан, ҡарға, турғайҙар  кеше йәшәгән урындарға яҡыныраҡ килә. Сөнки бында аҙыҡ табыуы еңелерәк уларға.

сәүкә – галка                ҡарлуғас - ласточка

сатнама һыуыҡтар – трескучие морозы  һуйыр – глухарь  ҡор - тетерев

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| кәкүк | умарталыҡ | йүкә |
| тал | алабуға | алмағас |
| терпе | гөлйемеш | ҡолон |
| ҡуян | бүре | бала |
| һеләүһен | быҙау | ағас |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| татарин | город | город Уфа |
| река | калина | свинья |
| самая большая | цветок | ворона |

## Вариант 7

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡарағай, ағас.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Ҡарағай.

Ҡарағай – беҙҙең яҡ урмандарының иң ҡиммәтле ағасы. Ул Башҡортостандың бик күп районларында үҫә.

Уның тәбиғәткә, халыҡ хужалығына файҙаһы бик ҙур. Төҙөлөштә ҡарағай иң кәрәкле ағас. Был ағастан төҙөлгән өйҙәр һәм биналар йөҙ йылдан артыҡ серемәй, кешегә хеҙмәт итә.

Ҡарағайҙан скипидар эшләйҙәр. Скипидар баҡыр, ҡурғаш, цинк рудаларын эшкәртеүҙә файҙаланыла.

Бына ниндәй ҡиммәтле ағас үҫә беҙҙә.

ҡарағай - сосна

халыҡ хужалығы – народное хозяйство файҙаланыла – используется

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| ҡолон | һағыҙаҡ | умырзая |
| ҡуян | балан | хайуан |
| аҡҡош | тирәк | терпе |
| сабаҡ | муйыл | өйрәк |
| йорт хайуаны | ләлә | имән |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| рыба | малина | лес |
| Агидель | медведь | яблоко |
| столица | петух | матрешка |

## Вариант 8

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: үлән, сәскә.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Дарыу үләндәре.

Беҙҙең яҡтарҙа күп төрлө дарыу үләндәре үҫә. Бына улар: мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, кесерткән, әрем, юл япрағы һәм башҡалар.

Юл япрағы – бик яҡшы дарыу үләне. Уны яраға ябалар. Был үлән юл буйҙарында осрай. Уның япраҡтары ҡаты була. Шуға күрә аяҡ табаны ла, тәгәрмәс тә уға ҡурҡыныс түгел. Үләндең һабағы нәҙек була. Сәскәһе ҡойолғас, унда ваҡ ҡына орлоҡтар өлгөрә. Үҫемлек юл буйында үҫә һәм «юл япрағы» тип атала.

Дарыу үләндәрен белергә кәрәк.

дарыу үләндәре – лекарственные травы юл япрағы-подорожник
һабаҡ - стебель аяҡ табаны - ступня

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| бал | умартасы | ҡайын |
| андыҙ | майҙан | әрем |
| имән | болан | ташбаш |
| сәскә | һыйыр | күгәрсен |
| мәтрүшкә | тейен | үпкә |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| береза | петух | рыба |
| Нугуш | кукушка | цветок |
| Торатау | дуб | Уфа |

**Вариант 9**

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡаҙ, кеше.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Күңелле байрам.

Беҙҙең республикабыҙҙың баш ҡалаһы Өфөлә музыка байрамы ойошторолдо. Был матур байрамға республиканың һәр районынан йырсылар, бейеүселәр, ҡурайсылар, гармунсылар йыйылды. Улар йырланылар, бейенеләр. Оҫта ҡурайсылар ҡурайҙа башҡорт халыҡ көйҙәрен уйнанылар. Бында һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары, алдынғы эшселәр һәм колхозсылар, хатта бәләкәй балалар ҡатнашты.

Ғаилә ансамблдәре, һәүәҫкәрҙәр һәм артистар халҡыбыҙҙың милли көйҙәрен, бейеүҙәрен оҫта башҡарҙылар.

ойошторолдо – был организован оҫта - умелый

һәүәҫкәр – любитель милли -национальный көйҙәрен - мелодии

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| кәкүк | умарталыҡ | йүкә |
| тал | алабуға | алмағас |
| терпе | гөлйемеш | ҡолон |
| ҡуян | бүре | бал ҡорто |
| һеләүһен | быҙау | ағас |

2. Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| тетрадь | мама | черный |
| работа | сестра | соль |
| ворона | теплый | гость |

## Вариант 10

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡош, кыҙ.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Салауат Юлаев.

Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры. Өфө ҡалаһында уға матур һәйкәл ҡуйылған. Был һәйкәлде оҫта скульптор Сосләнбәк Тавасиев ижад иткән. Скульптор Салауат Юлаевтың тормош юлы, батырлығы менән ҡыҙыҡһынған: уның тураһында күп уҡыған, ябай кешеләр менән һөйләшкән, уҡымышлы кешеләр менән фекер алышҡан. Шунан ошо һәйкәлде эшләргә булған. Хәҙер был һәйкәл баш ҡалабыҙҙың символына әйләнде.

Салауат Юлаев һәйкәленең бейеклеге 19,8 метр, ауырлығы 40 тонна. Ул Санкт-Петербургтың «Монумент – скульптура» заводында суйындан эшләнде. Был һәйкәл өсөн скульптор Тавасиевҡа СССР-ҙың Дәүләт премияһы бирелде.

ижад иткән - создал, сотворил суйын – чугун ҡыҙыҡһынған -интересовался
уҡымышлы – образованный фекер алышҡан –делился мыслями

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| ләлә | алабуға | йылға |
| миләш | йүкә | ағас |
| балыҡ | умартасылыҡ | тейен |
| йәйен | һағыҙаҡ | төлкө |
| тал | тай | ҡолон |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| солнце | неделя | белый |
| большой | брат | воробей |
| дорога | голова | книга |

**Вариант 11**

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡыр, боҙ.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Башҡортостан йылғалары.

Башҡортостандың иң зур йылғаһы - Ағиҙел. Ул Урал тауҙарында башлана. Ағиҙел буйында бик күп ҡалалар һәм ауылдар урынлашҡан. Улар араһында Белорет, Мәләүез, Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалалары, төрлө ауылдар бар.

Өфө ҡалаһы ла Ағиҙел ярында һалынған. Өфө эргәһендә Ағиҙелгә Ҡариҙел йылғаһы ҡоя. Был йылғаның матурлығы бөтә Башҡортостанға билдәле. Ҡариҙел – күп һыулы йылға.

Дим йылғаһы – Башҡортостандың оҙон һәм матур йылғаларының береһе. Ул Дим исемле бәләкәй ауыл эргәһенән башлана. Дим ярҙарында уҫаҡ, тирәк, тал ағастары үҫә. Ял көндәрендә Дим яры ял итеүсе халыҡ менән тулы була. Бында күп ҡалаларҙан ял итергә киләләр.

уҫаҡ – осина    күп һыулы- полноводная    ҡоя - впадает
тирәк - тополь

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| йүкә | муйыл | имән |
| сәскә | үлән | бал |
| ҡарлуғас | ҡыңғырау | балыҡ |
| миләш | ынйы | усаҡ |
| тәбиғәт | үҫемлек | ҡыуаҡ |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| животное | село | трава |
| собака | журавль | ночь |
| мальчик | кот | девочка |

## Вариант 12

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡолон, яҙ.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Башҡортостан.

Башҡортостан – башҡорттарҙың тыуған иле. Башҡорт ерендә рустар, татарҙар, сыуаштар һәм башҡа халыҡтар төйәк тапҡан.

Башҡортостанда бейек тауҙар, ҡалын урмандар бик күп. Республикабыҙҙың ер аҫтында «ҡара алтын» ята, баҫыуҙарында мул иген үҫә, яңы ҡалалар, ауылдар барлыҡҡа килә. Уларҙа тырыш эшселәр, төҙөүселәр, уңған игенселәр, мал ҡараусылар йәшәй.

Башҡорттар – күңелле, эшсән халыҡ. Уларҙың һөнәрҙәре төрлө булған. Башҡорттар һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән.

1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостан республикаһы азат, суверенлы дәүләт итеп иғлан ителде. Башҡорт халҡының тарихында яңы дәүер башланды.

Беҙҙең тыуған республикабыҙ –-ҙур, ҡеүәтле.

төйәк - родная земля, родина    һөнәр – ремесло    дәүер – эра, эпоха
солоҡсолоҡ – бортничество    ҡеүәтле - мощный

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| умарталыҡ | ялан | башаҡ |
| һарыҡ | балан | һандуғас |
| бөркөт | бал | ҡыҙылтүш |
| бәрҙе | һыйыр | күгәрсен |
| мәтрүшкә | тейен | баш ҡала |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| рыба | деревня | лес |
| утка | лебедь | сад |
| год | кошка | день |

## Вариант 13

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: таш, баҙ.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Рәшит Нурмөхәмәтов.

Башҡортостан һәләтле кешеләргә бик бай. Ундай кешеләрҙең береһе – рәссам Рәшит Нурмөхәмәтов. Ул Өфөлә эшсе ғаиләһендә тыуған. Ябай ғаиләлә үҫкән егет бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә яратҡан. 1940 йылда ул Өфөләге театр- сәнғәт училищеһына уҡырға ингән.

Рәссам Рәшит Нурмөхәмәтов ауыл кешеләре, игенселәр, малсылар, нефтселәр тураһында матур картиналар ижад иткән.

Беҙҙең илебеҙ Нурмөхәмәтовтың хеҙмәтен юғары баһаланы. Ул - Салауат Юлаев премияһы лауреаты, РСФСР- ҙың атҡаҙанған рәссамы.

| | |
|---|---|
| рәссам- художник | һәләтле – талантливый |
| баһаланы – оценил (а) | атҡаҙанған - заслуженный |

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте их во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| ҡолон | һағыҙаҡ | умырзая |
| ҡуян | бала | хайуан |
| аҡҡош | тирәк | терпе |
| сабаҡ | муйыл | өйрәк |
| йорт хайуаны | ләлә | ҡаҙ |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| наш | красивый | большой |
| спортивный зал | кабинеты | столовая |
| человек | группа | цветок |

## Вариант 14

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡош, яҙ.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Яҙ башлана.

Яҙ килә. Көндәр оҙоная, йылына. Өй башынан тамсылар тама башлай.

Тәбиғәт тә үҙгәрә. Ул көндән - көн матурлана. Аҡ ҡар ирей, тау баштары ҡарая. Ағастарҙа бөрөләр бүртә. Ҡоштар йылы яҡтарҙан ҡайта башланы. Уларҙың күбеһе былтырғы ояларын эҙләй. Ҡара ҡарғалар ағас баштарында оялар яһайҙар. Сыйырсыҡтар өй янындағы үҙҙәренең ояларына урынлашалар. Улар һәр яҙғы көндө матур йыр менән башлайҙар.

тәбиғәт – природа былтырғы – прошлогодний
бөрөләр бүртә – набухают почки

**Работа на перевод.**

1.Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| бала | көн | ҡул |
| турғай | синыф | кеше |
| теш | ҡуян | өй |
| эш | төркөм | һыйыр |
| баш | ҡыҙ | ат |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| стол | человек | сад |
| школа | красивый | сосед |
| корова | воробей | мальчик |

**Вариант 15**

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: баҡсасы, ҡурай.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Ҡанатлы ярҙамсылар.

Тимурҙың олатаһы — яҡшы баҡсасы. Ул колхоз баҡсаһында алма, сейә, ҡурай еләге, ҡара ҡарағат үҫтерә. Тимур олатаһына баҡсаны таҙартырға ярҙам итә. Ә олатаһы Тимурға ҡоштар тураһында һөйләй. Ейәне уны иғтибар менән тыңлай.

Тимурҙың олатаһы ҡоштарҙы бик ярата. Ул уларҙы кешенең ҡанатлы ярҙамсылары тип атай. Сөнки улар баҡсалағы зарарлы бөжәктәрҙе үҙҙәре лә ашай, балаларына ла ашата. Ҡоштар йәй буйына бик күп ҡарышлауыҡты юҡ итә.

ейән – внук иғтибар менән – внимательно
зарарлы бөжәктәрҙе – вредных насекомых
ҡарышлауыҡты - гусениц

**Работа на перевод.**

1Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| таш | төн | тау |
| ҡарағат | күлдәк | ҡаш |
| урам | ҡала | ат |
| эт | урман | ғаилә |
| болот | тел | ауыл |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| дом | кошка | мед |
| рябина | деревня | липа |
| елка | чуваш | липовый мед |

## Вариант 16

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡар, уҡыусы.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Ҡыш.

Бына <u>һалҡын</u> ҡыш килеп етте. Урамда аҡ ҡар ята. Тышта бик һыуыҡ. ҡоштар һайрамай. Күсмә ҡоштар <u>йылы</u> яҡҡа китеп бөтә. Беҙҙең яҡта ҡышларға сәүкә, һайыҫҡан, турғай, күгәрсен генә ҡала. Улар кеше йәшәгән урындарға яҡынырыҡ килә.

Ҡышҡы урман бик матур. Ҡарҙа йәнлектәр эҙҙәре күренә.

Уҡыусыларҙың ҡышҡы каникулдары башланды. Улар сана шыуа, конькиҙа йөрөй. Бәләкәй балалар ҡаты һыуыҡтан ҡурҡмай тышта уйнай.

күгәрсен – голубь　　йәнлек – зверек　　сәүкә – галка
күсмә ҡоштар – перелетные птицы

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| китап | төн | һайыҫҡан |
| ҡала | аш | эт |
| башҡорт | ҡуян | ҡарға |
| дәфтәр | бүре | күл |
| аш | икмәк | малай |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| зима | улица | лес |
| животное | стол | плохой |
| мальчик | отец | кукушка |

## Вариант 17

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ҡыш, турғай.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Ҡоштар.

Ҡыш. Бөтә ерҙә ап-аҡ ҡар. Урман тып-тын. Ҡыш беҙҙең яҡта бик һалҡын була. Ҡоштар һәм йәнлектәргә ҡышын бик ҡыйын.

Был ваҡытта сыйырсыҡ, ҡарлуғас, һандуғас күптән инде йылы яҡҡа китә. Беҙҙә ҡышларға сәүкә, һайыҫҡан, турғай, күгәрсен генә ҡала.

Ҡорҙар, һуйырҙар сатнама һыуыҡтарҙы ҡар аҫтында үткәрәләр. Ә һайыҫҡан, ҡарға, турғайҙар кеше йәшәгән урындарға яҡыныраҡ килә. Сөнки бында аҙыҡ табыуы еңелерәк уларға.

| | | |
|---|---|---|
| ҡарлуғас – ласточка | һандуғас – соловей | ҡорҙар – тетерева |
| һуйырҙар – глухари | сатнама - трескучие | |

1. Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| ауыл | кәкүк | шәкәр |
| ҡалаҡ | юл | туп |
| эш | кишер | китап |
| һарыҡ | сәскә | көс |
| күҙ | төлкө | күлдәк |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| Салават Юлаев | «Красная книга» | Стерлитамак |
| писатель | лес | деревня |
| деревня | гора | дорога |

**Вариант 18**

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: ағас, ҡош.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Декабрҙә.

Башҡортостанда ҡыш ноябрь аҙағында, декабрь башында башлана. Күлдәр, йылғалар боҙ менән ҡаплана. Ағастар яланғаслана. Тик шыршы һәм ҡарағайҙар ғына йәп-йәшел булып ултыралар. Ҡоштар һайрамай. Күсмә ҡоштар йылы яҡҡа китеп бөтә.

Декабрь аҙағында, ғинуар башында көслө һыуыҡтар башлана.

Ҡоштар һәм йәнлектәргә ҡышын бик ҡыйын. Ҡоштар һалҡынға сыҙамлы. Уларҙы аслыҡ ҡына һәләк итә. Ас булһа, өшөй ҙә, аҙыҡ эҙләргә хәле ҡалмай. Ҡоштарҙы ашатығыҙ.

сыҙамлы – терпеливы, выносливы аслыҡ – голод
һәләк итә – губит күсмә ҡоштар – перелетные птицы

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| һуған | яҙ | ҡала |
| кәзә | өкө | урман |
| йәй | тау | шәшке |
| гөл | ҡош | ҡар |
| ҡул | япраҡ | йылға |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| ночь | школа | гора |
| весна | человек | мальчик |
| зима | красивый | цветок |

## Вариант 19

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: кишер, уңыш.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Беҙҙең уңыш.

Беҙ йәй көнө колледж баҡсаһында эшләнек. Бына хәҙер уңыш йыябыҙ. Һәр төркөм йәшелсәләрҙе йыйып ала, күргәҙмәгә әҙерләнә.

Бына күргәҙмә көнө етте. Өҫтәлдәргә ҙур-ҙур ҡарбуздар, ҡыҙыл помидорҙар, аҡ сөгөлдөрҙәр, һары шалҡандар ҡуйылған. Эре картуфтар, кишерҙәр, һуғандар кәрзиндәрҙә ята.

Студенттар үҙ эштәре тураһында һөйләйҙәр, тәжрибә менән уртаҡлашалар. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең эшебеҙ тураһында һөйләнек.

| | |
|---|---|
| күргәҙмәгә – к выставке | тәжрибә – опыт |
| уртаҡлашалар – делятся | үҙебеҙҙең – о своей |

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| алма | сөгөлдөр | бүре |
| бесәй | ямғыр | күҙ |
| ҡайын | таш | тамсы |
| ҡош | дәрес | таҡта |
| төлкө | бала | ҡәләм |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| дом | кошка | мед |
| рябина | деревня | липа |
| елка | чуваш | липовый мед |

**Вариант 20**

**Работа с текстом.**

1. Спишите и переведите текст.
2. Образуйте степени сравнения от подчеркнутых прилагательных.
3. Просклоняйте по падежам имена существительные: көн, дәрес.
4. Найдите в тексте два глагола и определите их число, лицо, время.

Минең бер көнөм.

Мин көн һайын алтыла торам. Башта үҙемә кофе ҡайнатам. Шунан урынды йыйыштырам, иртәнге гимнастика яһайым. Артабан ваннаға инәм, йыуынам. Шунан кейенәм һәм иртәнге ашты ашайым. Ике сынаяҡ шәкәрләп йылы кофе йәки тәмле бал менән сәй эсәм.

Һигеҙ тула ун биш минуттан өйҙән сығам. Колледжда дәрестәр һигеҙҙә утыҙҙа башлана һәм сәғәт дүрттә бөтә. Төшкө ашты ашханала ашайым. Колледждан ҡайтҡас дәрес әҙерләйем. Кис көнө телевизор ҡарайым, музыка тыңлайым, берәй яҡшы китап уҡыйым. Сәғәт ун берҙә йоҡларға ятам.

башта – сначала шунан – затем, после артабан – далее
сынаяҡ - чашка

**Работа на перевод.**

1. Данные слова переведите и поставьте во множественном числе.

| | | |
|---|---|---|
| ҡала | ат | эт |
| урман | ғаилә | болот |
| тел | бәрҙе | һыйыр |
| күгәрсен | мәтрүшкә | тейен |
| баш | ҡала | ауыл |

2.Данные слова переведите на башкирский язык.

| | | |
|---|---|---|
| день | семья | река |
| цветок | тетрадь | липа |
| высокий | солнце | ласточка |